Муллагалина Миляуша Халиловна
МБОУ башкирский лицей им. М.Бурангулова
План-конспект урока и презентация (по башкирскому языку)

Тема: Оҙайтылған каникул.Сафуан Әлибаев

Маҡсат: шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү;
телмәр үҫтереү;
ҡышҡы тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү;

Дәрес барышы

1. Ойоштороу

- Уҡыусылар, иғтибар менән таҡтаға ҡарағыҙ әле. Һеҙгә ребус бирелгән. Ребусты сисһәк, бөгөнгө дәрестә нимә тураһында һүҙ барасағын белербеҙ.(каникул)

- Ә нимә һуң ул каникул?
- Каникул - латин һүҙе, «канис» тан алынған. Боронғо Римдар Сириус йондоҙон «каникула» тип йөрөткәндәр. Горизонтта Сириус йондоҙо күренеү менән, Римда йәйге эҫе көндәр башлана. Был саҡта уҡыуҙар булмай торған. Уҡыуҙан туҡтап торған көндәрҙе каникулдар тип атағандар ҙа инде.

- Ә ҡышҡы каникулды һеҙ нисек үткәрәһегеҙ?
- Коньки шыуырға ҡайҙа бараһығыҙ? (Ыласынға)
- Уҡыусылар, «Ыласын» спорт һарайы алдында ошондай бер белдереү тора. ҡар яуғас ҡайһы бер хәрефтәре юйылған. Беҙгә уны яҙып бөтөрөргә кәрәк.
- Хаталарын төҙәтергә

- Белдереүҙе маскалар менән уҡыу
- Кемгә ҡайһыһы маска менән уҡыу оҡшаны?
- Һеҙҙе ҡыш бабай менән ҡарһылыу саҡырған. Ә һеҙ бараһығыҙмы?
- Ә ҡышҡы каникул ҡасан башлана? (31 декабрҙә)
- ҡышҡы каникулда һеҙ нисә көн ял итәһегеҙ? (16)

- Быйылғы ҡышҡы каникул, уҡыу планына ярашлы, 31 декбрҙән - 15 ғинуарға тиклем буласаҡ.

- Уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?
- Эйе, темабыҙ - каникул.

- Бөгөн уҡыясаҡ шиғырыбыҙ «Оҙайтылған каникул»тип атала.

(таҡтаға теманы яҙам )

- Шиғыр ни өсөн «Оҙайтылған каникул»тип атала?

- Автор Сафуан Әлибаев был шиғырын ниңә шулай тип атаны икән?
  Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (балаларҙың яуаптары)

- Ә бына ҡайһығыҙҙың фекере авторҙың фекере менән тура килер икән?
  Шиғырҙы уҡығандан һуң белербеҙ.

Дәфтәрҙә датаны, теманы яҙыу

Автор тураһында белешмә

- Сафуан Әлибаев
- шағир
- 1941 й. 21 февралендә Салауат районы Тирмән ауылында тыуған.
- «Тылсымлы шар» исемле балалар өсөн яҙылған шиғырҙар, йырҙар, әкиәттәр китабы өсөн Ганс Христиан Андерсен исемендәге Халыҡ – ара премия бирелгән.

- Китаптарығыҙҙың 109- сы битен асығыҙ

- һүҙлек эше (Ә хәҙер шиғырҙа осраясаҡ һүҙҙәр өҫтөндә эшләп алайыҡ)
- уҡытыусының уҡыуы
- сылбырлап 2-шәр юл уҡыу, тәржемә итеү
- һорауҙарға яуап биреү
  - шиғырҙа ҡайһы ваҡыт һүрәтләнгән?
  - ниндәй һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр ҡыш икәнен хәбәр итә?
    (ҡыш көнө, каникул, коньки, саңғы, шыуған саҡта, сана, елка,

шыршы, ҡар, ҡыш бабай, һалҡын)
- шиғырҙа балаларҙың ниндәй уйындары тураһында әйтелә? (табып уҡығыҙ)
- Ә хәҙер яуаптарығыҙҙы нығытып ҡуяйыҡ
  Яҙыуҙы һүрәт менән дөрөҫ итеп тоташтырығыҙ

  Яуаптарығыҙҙы дәфтәргә яҙып ҡуйығыҙ

Каникулда беҙ  конькиҙа елдерәбеҙ, саңғы шыуабыҙ, хоккей уйнайбыҙ, тауҙан сана шыуабыҙ, ҡар бабай яһайбыҙ.

- Ә ни өсөн шиғыр «Оҙайтылған каникул»тип атала?
  Шиғырҙан ошо урынды табып уҡығыҙ.
  (Көн бик һалҡын, ҡыш бабайға беҙҙең уйын оҡшаған)
- Ошо строфаны (куплетты) хор менән ролләп уҡыйыҡ (1рәт - автор, 2 рәт - диктор)
- Көндәр һыуыҡ булғанға
- Кемдәрҙең шиғыр уҡыр алдынан әйтелгән фекере авторҙың фекре менән тап килде?
- Температура нисә градус булһа башланғыс класс уҡыусыларына мәктәпкә килмәҫкә мөмкин? (- 25 һәм унан түбән буған осраҡтарҙа)
- дөрөҫ уҡыусылар

- Иғтибар менән таҡтаға ҡарағыҙ
  Шиғырҙың 1-се строфаһынан сифаттарҙы табабыҙ
  (оҙайтылған, ҡыш, төрлө)
  Антонимдарын әйтегеҙ
  оҙайтылған – ҡыҫҡартылған
  ҡыш – йәй
  төрлө – бер

- Төркөмдәрҙә эш
  «ҡар йомғағы» уйыны

| | |
|---|---|
| ҡыш. | ҡар. |
| ҡыш етте. | ҡар яуа. |

Ял минуты

- Ә хәҙер ял итеп алайыҡ. эшләгән (әүәләгән) йомғаҡтарыбыҙҙан ҡар бабай менән шыршыны эшләп ҡуяйыҡ. 2 төркөмгә бүленәбеҙ.
1- шыршы, 2- ҡар бабай

Ял итеп алдыҡ, эште дауам итәйек.

- Синквейн
  Каникул һүҙенә синквейн төҙөгөҙ

  (уҡыусылар әйтәләр, мин таҡтала яҙам)
- Ә ҡыш бабай ошондай синквейн төҙөгән.

- Кластер
  Каникул һүҙенә кластер төҙөгөҙ
- Ниндәй каникул була икән?
- Төркөмдәрҙән 2- шәр кеше сығып таҡтала яҙа
  (ҡышҡы, оҙайтылған,файҙалы, күңелле, ҡыҫҡа, оҙон)

- Һорауҙарға яуап биреү
  Ә хәҙер бөгөнгө дәрестә алған белемдәрегеҙҙе нығытып ҡуяйыҡ.

- Уҡыусылар, бөгөнгө дәрес һеҙгә оҡшанымы?
- Дәрестә нимәләр белдек?
  (каникул, шиғыр уҡыныҡ, өйрәндек, шиғырҙан сифаттар, антонимдар таптыҡ, С.Әлибаев тур-да белдек, ҡар бабай төҙөнөк, синквейн, кластер төҙөнөк, «ҡар йомғағы» уйынын уйнаныҡ, һорауҙарға яуап бирҙек)

- Ә хәҙер тренажер таблицаһы ярҙамында таҡталағы һөйләмде уҡып, бер һығымтаға килербеҙ.

  Көндәр бик һалҡын,
  дәрестәр булмай.

- Эйе, көн бик һалҡын булһа, һеҙҙең өшөп ҡуйыуығыҙ бар, ауырып китеүегеҙ бар. Оҙаҡламай ҡышҡы каникулы етә. Файҙалы һәм күңелле үткәрегеҙ, саф һауала күберәк булығыҙ!

Өйгә эш.
- Өйҙә ижади эш эшләргә.

«Оҙайтылған каникул» шиғырындағы айырым һүҙҙәрҙе һүрәт менән алмаштырып яҙып килегеҙ.

- Бына һеҙгә өлгө.

- Баһалау. Афарин. Бөтәгеҙҙә бөгөн дәрестә тырыштығыҙ. Барығыҙға ла «5» билдәһе ҡуям.